# Тел төҙәткестәр





Аҡ-аҡ-аҡ -
- дөрләп яна усаҡ



Те-те-те -
- түтәлдәргә һыу һипте



Ты-ты-ты -
- Хәмит йоҡларға ятты



Ыҙ-ыҙ-ыҙ -
- бик күңелле уйнайбыҙ



**Ол-ол-ол -**
**ҡыҙыҡ уйын ул футбол**



**Ҡа-ҡа-ҡа -**
**китеп барам походҡа**



**Ға-ға-ға -**
**ултырығыҙ поезға**



**Ар-ар-ар -**
**ябалаҡлап яуа ҡар**



Ға-ға-ға -
- килдем мин уҡырға



Ыр-ыр-ыр -
- ҡойоп яуа ямғыр



Ма-ма-ма -
- терпе тапҡан алма



Ар-ар-ар -
- был минең дуҫтар

## тә-тә-тә -
бигерәк тәмле кәбеҫтә



## аш-аш-аш -
бәйләп бөттөм ойоҡбаш



## ур-ур-ур -
зәңгәр сәскә ныҡ матур



## ҙы-ҙы-ҙы -
осоп килде бер ҡауҙы



**ыҡ-ыҡ-ыҡ -**

китаптары бик ҡыҙыҡ



**үк-үк-үк -**

торамын иртүк



**ып-ып-ып -**

йырлашабыҙ ҡысҡырып



**әп-әп-әп -**

усаҡ яна дөрләп



**гә-гә-гә -**
һыу һибәбеҙ гөлдәргә



**шә-шә-шә -**
күгәрсендәр гөрләшә



**ғыс-ғыс-ғыс -**
бигерәк йәтеш ултырғыс



**лар-лар-лар -**
сирләп ята балалар





**Тәр-тәр-тәр -**
**- йүгереп килде себештәр**



**Ға-ға-ға -**
**- киттек беҙ тауға**



**Кә-кә-кә -**
**сәскәләр хуш еҫ бөркә**



**Тәс-тәс-тәс -**
**ҡустым итә тәс-тәс**



Да-да-да -
ҡыҙынабыҙ беҙ ҡомда



Лө-лө-лө -
уйынсыҡтар күп төрлө



Ам-ам-ам -
уйнарға китеп барам



Оп-оп-оп -
турғайҙар килде осоп


рә-рә-рә -
бейек һикерә көнгерә
ҙө-ҙө-ҙө -
бына төлкөнөң өңө
ләй-ләй-ләй -
серәкәй әсе тешләй
ҡай-ҡай-ҡай -
ап-аҡ ҡына ҡуянҡай



Ам-ам-ам -
- силәгемә ҡом һалам



Ра-ра-ра -
ҡара менән яҙып ҡара



Гә-гә-гә -
әкиәт уҡый бесәйгә



Оп-оп-оп -
шарҙарым китте осоп



Нә-нә-нә -

бигерәк тиҙ әйләнә



Әм-әм-әм -

иҙәндәрҙе һеперәм



Ре-ре-ре -

һунарға сыҡҡан бүре



Ай-ай-ай -

тырышып-тырышып буяй

Торомтаева Рәмилә Юлай ҡыҙы,
Сибай ҡала гимназияһының  башланғыс кластар уҡытыусыһы

Материалдар алынды:
БАШҠОРТ БАЛАҺЫ МИН…
https://vk.com/bashkort_balahy_min
https://vk.com/photo-90379629_398857144